# Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның тормошо һәм ижадына арналған презентация

# «ИЛ ЙӨРӘГЕН ТОЙОУСЫ»



… Теләр инем, гранит ҡая булып,
Ер өҫтөнә ҡабат тыуырға.
Теләр инем йәшәү ҡаршыһында
Сал башымды эйеп торорға.

З. Биишева



# Зәйнәб Биишева
# (1908–1996)

1968 йылда Салауат Юлаев исемендәге премияға, 1990 йылда Банҡортоҫтандың Халыҡ яҙыуҫыһы тигән юғары исемгә лайыҡ була.

Биишева Зәйнәб Абдулла ҡыҙы 1908 йылдың 15 ғинуарында Башҡортостандың Күгәрсен районы Туйөмбәт ауылында тыуған.

Ата-әсәһенән бик иртә етем ҡала. Зирәк ҡыҙ бәләкәй саҡтан белемгә ынтылып үҫә. Әммә тормош ауырлығы арҡаһында 4-се класты фәҡәт 1924 йылда ғына тамамлай. Мәктәп йылдарында ул шиғырҙар яҙа башлай.



Зәйнәп 16 йәшендә генә 4-се класты тамамлай ала. Зирәк ҡыҙҙы Ырымбурҙағы Башҡорт педагогия техникумына уҡырға ебәрәләр. Был осорҙа уның менән бергә буласаҡ яҙыусы-сатирик Сәғит Агиш, Ғәйнан Хәйри белем ала.

# ЙӘШӘҮ БӘХЕТЕ

Йәшәү бәхете — өмөт, хеҙмәттә.
Йәшәү бәхете — дуҫлыҡ, хаҡлыҡта.
Йәшәү бәхете — илең, халҡың өсөн
Көрәш аша тыуған шатлыҡта.

Зәйнәп Биишеваның тәүге хикәйәһе 1930 йылда “Пионер” журналында баҫыла. Ә “Партизан малай” тип аталған беренсе китабы 1942 йылда донъя күрә. 40-60-сы йылдарҙа “Көнһылыу”, “Сәйер кеше”, “Ҡайҙа һин, Гөлниса?”, “Уйҙар, уйҙар…” “Мөхәббәт һәм нәфрәт” кеүек киң билдәле китаптары нәшер ителә. Төп хеҙмәте – трилогия - “Кәмһетелгәндәр”, “Оло Эйек буйында” һәм “Емеш” романдары.



1941 йылдан КПСС, 1949 йылдан — СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы.
1951 йылдан алып профессиональ яҙыусы.

# Яҙыусының ижады

Беренсе яҙған хикәйәһе 1930 йылда "Гөрләүектәр араһында"исеме менән "Октябрь" журналында сығарыла.

1942 йылда "Партизан малай" повесын баҫтыра. 60-лап китабы Рәсәйҙең һәм донъяның төрлө телдәрендә нәшер ителә. 1968 йылда «Кәмһетелгәндәр», «Оло Эйек буйында» романдары өсөн Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ була.

Башта ул балалар яҙыусыһы булараҡ танылa. Балалар өсөн хикәйәттәр, шиғырҙар, әкиәттәр ижад итә. «Дуҫ булайыҡ», "Ҡояш нимә тине", "Башаҡ",«Көнһылыу», «Гөльямал», «Сәйер кеше», "Өмөт бөрөләре", «Уйҙар, уйҙар...» һымаҡ заман өсөн бик тә актуаль повестар яҙа. «Мөхәбәт һәм нәфрәт», «Нәҙер», «Тылсымлы ҡурай» исемле сәхнә әҫәрҙәре яҙа. "Салауат монологы", "Имән" поэмалары авторы.


Зайнаб
Биишева
Избранное


З. Биишева
Дуҫлыҡ


Зәйнәп Биишева


З. Биишева
Бәхет
ҡыҙы
хаҡында
әкиәт


Зайнаб Биишева
МАСТЕР
И
ПОДМАСТЕРЬЕ


З. БИИШЕВА
ЕЛ-ЕЛ
АРБАМ


ЗӘЙНӘП
БИИШЕВА
ЯҠТЫҒА






КИРӘЙ
МӘРГӘН

# Хәтер

2016 йылдың 14 октябрендә Өфөлә Октябрь проспектындағы аллеяла Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваға һәйкәл асылды.1992 йылда «Башҡортостан» киностудияһы тарафынан «Зәйнәб Биишева», 2008 йылда яҙыусының 100 йыллығына ҡарата «Беҙҙең Зәйнәб» исемле документаль фильмдар төшөрөлә (режиссер, сценарий авторы Ә. Абдразаҡов). Зәйнәб Биишева исемен йөрөтәләр: «Китап»нәшриәте; Өфөлә урам; Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы. 2012 йылда БДУСтәрлетамаҡ филиалына үҙгәртелгән. Мораҡ ауылында дөйөм белем биреү мәктәбе. Әҙәби премия— Күгәрсен районы хакимиәте һәм Башҡортостан союзының 1999 йылда берлектә булдырған премияһы. Күгәрсен районы Туйөмбәт ауылында яҙыусының йорт-музейы эшләй.

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева

# Йәшәү бәхете

Ғаиләһе Зәйнәб Абдулла ҡыҙының ире Ғәзиз Әминев һуғышта ҡатнаша , орден-миҙалдар менән наградлана , ҡаты яралар алып , икенсе төркөм инвалиды булып ҡайта . Зәйнәб апай байтаҡ йылдар ауырыу ирен , етем апаһын ҡарай , өс улын аяҡҡа баҫтыра . Бөгөн оло улы Тельман Әминев – химия фәндәре докторы , профессор, Рәсәй тәбиғәт фәндәре академияһында эшләй , уртансыһы Юлай – шулай уҡ ғалим , тәбиғәт фәндәре кандидаты, әсәһенең әҫәрҙәрен нәҡ ул руссаға тәржемә иткән . Кинйә улы , табип Дарвин, ҡыҙғаныс̧ҡа ҡаршы , мәрхүм булып ҡалған .

# Яҙыусының ғаиләһе




















Башҡортостан Республикаһында Зәйнәб Биишева исемен йөрөтәләр:
Өфө ҡалаһында «Китап" нәшриәте - иң ҙур Башҡортостан Республикаһында;
Урамдар ;
Стәрлетамак дәүләт педагогия академияһы ;
музей – йорты Үәмбәт ауылында (Күгәрсен районы);
Башҡорт гимназия № 140 Өфө калаһында

# Зәйнәп Биишева йәшәгән йорттағы таҡтаташ




ЗӘЙНӘБ БИИШЕВА
ИСЕМЕНДӘГЕ СКВЕР
СКВЕР ИМЕНИ
ЗАЙНАБ БИИШЕВОЙ
ZAINAB BIISHEVA
PUBLIC GARDEN



# Йорт-музейы



# Эш урыны




Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан
•КИТАП•
УФА
страницы ис
БАШКИРЫ
ИСТОРИКО-ЭТНОГРАФИЧЕСКИЕ ОЧЕРКИ
КУМ
Деко
ратив
ное

# «Булмаһа» шиғыры

Йәнһеҙ булыр ине
ғүмер,
Һөйөү менән йөрәк
тулмаһа.
Айырылышыу,
Өҙөлөп, һағынып көтөү,
Ярһып ҡаршы алыу
булмаһа.
1955

# Наградалары

1968 йылда «Кәмһетелгәндәр», «Оло Эйек буйында» романдары өсөн Салауат Юлаев исемендәге премия.

1968 йылда әҙәбиәт өлкәһендә күренекле хеҙмәттәре һәм ижтимағи эшмәкәрлеге өсөн «Почет Билдәһе» ордены, БАССР Юғары Советы Почет Грамотаһы.

1976 йылда икенсе тапҡыр «Почет Билдәһе» ордены.

1990 йылда «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы» тигән исем бирелә.

# Зәйнәп Биишева

-Ҡатын-ҡыҙҙар араһынан беренсе булып «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы» тигән оло исем алған шағир, драматург. -Революция һәм граждандар һуғышы осоронда башҡорт халҡының тормошон асыҡ сағылдырған эпик романдар ижад итеүсе. -Замандаштары тураһында повестар һәм хикәйәләр, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн пьесалар һәм әкиәттәр авторы. -Гоголь, Тургенев, Аксаков, Кассиль, рус һәм совет әҙәбиәтенең башҡа классиктарының әҫәрҙәрен башҡортсаға тәржемә итеүсе. -Әҙибәнең Рәсәй һәм донъя халыҡтары телдәрендә алтмыштан ашыу китабы баҫылып сыҡҡан.

1996 йылда әҙибәнең йөрәге тибеүҙән туҡтай…

# Зәйнәп Биишева-оҙайлы ижад юлы үткән яҙыусы

Мин белмәйем: ҡәнәғәтме Ерем?
Ҡәнәғәтме халҡым, дуҫтарым
Тик ышанам: бушҡа йәшәне, тип,
Әйтә алмаҫ хатта дошманым!

**Муниципаль бюджет учреждениеһының «Нуриман китапхана-клуб системаһы». Презентацияны Иҫке  Күл ауылы китапханасыһы Хисаева Мәҙинә Ғәфүр ҡыҙы  яҙыусы-Зәйнәб Биишеваға (тыуыуына 110 йыл) арнап төҙөнө.**